Ә.НАУРУЗОВ

# «Ирәмәл»дең нурлы иртәһе

Мәҙәниәт йорто янып юҡҡа сыҡҡандан бирле тамаша күрергә һыуһаған халыҡ спорт залына йыйылды.

Төрлө милли кейемдәге ҡыҙҙар һәм малайҙар йүгерешә. Концерт алдынан тулҡынланыуҙары йөҙҙәренә сыҡкан. Улар Уральск ҡасабаһындағы балалар ижады йортоноң «Ирәмәл» балалар халыҡ бейеүҙәре ансамбленең иң кескәйҙәр төркөмө (1-3-сө синыфтар) булып сыҡты.

Фәрүәз һәм Рәйес Ғариповтар ҡулдарына баян алып уйнап ебәреүҙәре булды, тәүләп кенә сығыш яһаған иң бәләкәйҙәр, ҡаҙ бәпкәләре һымаҡ теҙелешеп, бейергә сыҡты. Ҡыҙҙарҙың һығылмалы хәрәкәттәре, малайҙарҙың ихласлығы баштан уҡ күңелде арбаны. Саҡ ҡына ҙурыраҡ төркөм малайҙары, үҙҙәрен эрерәк тотоп, «Дәртле егеттәр» бейеүен башҡарҙы. Ҡыҙҙар «Күбәләк», «Гөлсәскәләр», «Әхирәттәр» хореографик композицияларын күрһәтте. Ә малайҙарҙың репертуарында «Әйҙә, баҫайыҡ әле!», «Балыҡсылар», «Һалдаттар» бейеүҙәре уңышлы һалынған. Парлап күмәк бейеүҙәрҙән «Байрамғол юрғалары», «Әйләнәйек бергәләп» тигәндәре лә сюжетлы булыуҙары менән иғтибарға лайыҡ ине. Башлап йөрөүселәр Заһир Әлхәмов, Руслан Хәлилов, Әлиә һәм Айгөл Камалетдиноваларҙың оҫталыҡтары һоҡландырҙы. Башҡорт халҡының эпик әҫәре буйынса һалынған «Байыҡ» бейеүен Булат Камалов айырата таһыллыҡ менән башҡарҙы. Йыр бүлексәһендә шөғөлләнгән Рената Ниғмәтуллина, Әҙилә Ғәлинурова, Зариф Хилажевтар үҙҙәренең сығыштары менән концертты байытты.

Уральск ҡасабаһында һуңғы йылдарҙа уҙғарылып торған бындай бейеү, йыр, ҡурай байрамдары осраҡлы хәл түгел. «Ирәмәл»дең барлыҡҡа килеүе танылған «Ләйсән» халыҡ бейеүҙәре ансамбленә тығыҙ бәйле. Был данлыҡлы ансамблдә үҙҙәре үҫеп, хәҙер йөрәк йылылығын балаларға өләшкән шәхестәр ойоштороҙо уны. Уларҙың фиҙакәр хеҙмәте һөҙөмтәһендә бейеү традицияһы үҫә, дауам итә. Хореография белгестәренең береһе — Рәзинә Нәбип ҡыҙы Хәзиева. Ул Ураҙ ауылы ҡыҙы. Хореография белгесе Рәзинә Хәзиева 1979 йылдан «Ләйсән»дә бейей башлай һәм әлегесә үҙ һөнәренә тоғро ҡала. Мәктәптә махсус бейеү дәрестәре асыу уйы тыуа унда, һәм республикала беренсе булып был эште бойомға ашыра. 1987 йылдан Рәзинә Хәзиева халыҡ бейеүҙәре дәрестәрен алып бара башлай.

— Дәрестәрҙе тәүҙә магнитофон яҙмаһындағы көйҙәр менән үткәрҙем. Бейеүгә өйрәтеү өсөн бер сәғәт кенә аҙ булғас, балаларҙы кистәрен түңәрәккә йыйҙым. Берәй кисә әҙерләргә тура килгәндә, костюмдарҙы өйгә алып ҡайтып йыуып, үтекләргә лә кәрәк булды, — тип хәтерләй Рәзинә Нәбип ҡыҙы.

Балаларға эстетик тәрбиә биреүҙә, уларҙы сәнғәткә ылыҡтырыуҙа Рәйес

Жәүҙәт улы Низаметдинов та ҙур тырышлыҡ күрһәтә. Ауыл хужалығы институтын тамамлаһа ла, сәнғәт үҙенә тарта егетте. 1994 йылда ул яңғыҙ бейеү менән республика конкурсы дипломанты, шул уҡ йылда уҙғарылған Фәйзи Ғәскәров исемендәге республика конкурсы лауреаты исемдәрен яулай. 1995 йылда Бөтә донъя башҡорттары ҡоролтайына арналған бейеү конкурсында икенсе, Учалыла ойошторолған республика бейеү ярышында беренсе урынға лайыҡ була. Көндәлек эшен Рәйес Низаметдинов Учалы районы Уральск ҡасабаһының балаларын, үсмерҙәрен бейергә, ҡурайҙа уйнарға өйрәтеүгә арнай.

Башҡортостандың атҡаҙанған уҡытыусыһы Елена Солтан ҡыҙы Ғөбәйҙуллина Уральск урта мәктәбенән хаҡлы ялға китһә лә, башлаған эшен ташламай. Рәзинә Хәзиева, Рәйес Низаметдинов менән кәңәшләшеп, бергәләп «Ирәмәл» бейеү ансамблен ойоштора.

1994 йылда уҡ уңышлы сығыштары өсөн ансамблгә «Өлгөлө» исеме бирелә. 1996 йылда «Халыҡ бейеүҙәре ансамбле» тигән юғары баһаға лайыҡ була.

1997 йылда йәш ҡурайсы Дим Мөжәүиров Урал аръяғы зонаһы конкурсында лауреат булды, шулай уҡ Ринат Камалов та бер нисә маҡтаулы исемгә лайыҡ.

Бейеүҙән тыш, балалар ижады йортонда тағы бер нисә бүлек эшләй. Хәҙер үҙ йорттары төҙөлөп бөттө. Ҡыҫҡа ғына итеп әйтелгән ошо юлдар эсендә ижад йортоноң директоры Елена Солтанованың ойоштороу һәләте, ҙур ныҡышмалығы, фиҙакәр хеҙмәте ята. Балалар ижад йортоноң эшенә белемен, таһылын һалған кеше ул.

«Тағы ла театр, вокаль-инструменталь ансамбль асасаҡбыҙ. Ижад йорто бинаһын төҙөүҙә Учалы хакимиәте, «Учалы тау-байыҡтырыу комбинаты» акционерҙар йәмғиәте, бүтән предприятиелар ҙур ярҙам күрһәтте, хакимиәт артабан да балалар хаҡына был эштә ярҙам итеп торор тип уйлайым», — ти Елена Солтанова.

«Ирәмәл»дең иртәһе яҡты, ҡояшлы. Бына шундай талантлы, дәртле, халыҡ ижадына ғашиҡ кешеләр йәшәй беҙҙең төбәктә.

